

## План:

1. Нимә ул шәжәрә? Уның барлыҡҡа килеү осоро.
2. Мөхәмәтшиндар шәжәрәһе.
3. Шәжәрәнең тәрбиәүи роле.
4. Ҡушымта

**Мөхәмәтшиндар шәжәрәһе**

*Мөхәмәтшина Зилә,*
*Федоровка 1 - се муниципаль*
*дөйөм урта белем биреү мәктәбенең*
*11 синыф уҡыусыһы*
*Етәксеһе:*
*Туҡбаева Эльмира Рәфис ҡыҙы*

«Шәжәрә» һүҙе ғәрәп теленән тәржемә иткәндә «нәҫел», «генеалогия» (ырыу тарихы) тигәнде аңлата. Тәүге осорҙа төрки халыҡтары шәжәрәһе 15-16 быуаттарҙа телдән-телгә тапшырылып килгән. Шәжәрәңде белеү, мәҫәлән, башҡорттарҙа мотлаҡ һанала.

Был тикшеренеүҙең маҡсаты - нәҫелемдең, ырыуымдың тарихын өйрәнеү, ата-бабаларҙың тамырҙарын киләсәк быуынға еткереү. Һәр кеше үҙенең нәҫелен, үҙенең туғандарын белергә, өйрәнергә тейеш. Шәжәрәңде белеү- үҙ нәҫелеңдең, ырыуыңдың һәм халҡыңдың тарихын белеү ул.

Шулай итеп мин, Мөхәмәтшиндар шәжәрәһен төҙөп, үҙемдең фамилиям олатайым - Мөхәмәтша исеменән барлыҡҡа килгәнен асыҡланым.

Шәжәрә – ул сал тарихҡа бағыр тәҙрә,
Күҙ яҙҙырһаң, шул тәҙрәнән атыр йәҙрә.
Ал бер үрнәк – бал ҡорттары төҙөй кәрәҙ,
Һин дә ятма: ҡор ояңды – үр шәжәрә.

«Шәжәрә» һүҙе ғәрәп теленән тәржемә иткәндә «нәҫел», «генеалогия» (ырыу тарихы) тигәнде аңлата. Нәҫел, ырыу тарихын төҙөүҙең үҙ тарихы бар. Европа монархтары, урыҫ батшалары, ҡытай императорҙарының генеалогиялары булғанлығы билдәле. Төрки халыҡтарына килгәндә, уларҙың нәҫел тарихы, генеалогик йылъяҙма төҙөүе алыҫ тарихҡа барып тоташа. Быны башҡорт,ҡаҙаҡ,төркмән,нуғай кеүек халыҡтарҙың телдән телгә күсеп килгән фольклорындағы «Урал батыр» (башҡорттарҙа), «Уғыҙ намә» (төркмән, азербайджан, төрөктәрҙә), «Манас» (ҡырғыҙҙарҙа), «Джангар» (ҡалмыҡтарҙа) кеүек тарихи, мифик, ярым мифик эпостар дәлилләй. Улар теге йәки был халыҡтың сығышы хаҡында иҫбатлаусы сығанаҡтар.

Тәүге осорҙа төрки халыҡтары шәжәрәһе, үрҙә әйтеп үтелгәнсә, телдән телгә тапшырылып килгән. Ырыуҙар тарихы 30-40 быуынға тиклем телдән тапшырыла алыуы ғәжәйеп күренеш, ул ғына ла түгел, ҡаһарман иҫтәлектәр, ата-бабаларҙың ғәмәлдәре тураһында легендалар һөйләнелгән, һуңғараҡ шәжәрәнең яҙма төрө барлыҡҡа килгән. Төрки шәжәрәһенең иң боронғо төрө тип 14 быуат тарихсыһы Фазлаллаһ Рәшид-әд Диндең (1312 йылда вафат булған) «Джәми-әт-тәуарих» (Йылъяҙмалар йыйынтығы) иҫәпләнә. Йыйынтыҡта төрки ҡәбиләләр тарихы генеалогик белешмәләр менән бергә бирелә. «Уғыҙнамә» эпосында шәжәрәнең ни өсөн төҙөлөүе тураһында ҡыҙыҡлы итеп яҙылған. Унда был хаҡта шундай юлдар бар: «Уғыҙ бөйөк батша булған һәм донъя менән идара итеүҙе үҙ ҡулына алғас, ул үҙенә байлыҡ һәм иҫәпһеҙ-һанһыҙ мал йыйған. Быларҙың барыһы ла хәҙер һеҙҙең ҡарамаҡта, һеҙ 6 ағай-эне һәр берегеҙҙең дүртәр улы-йәмғеһе 24 киләсәк быуыны бар. Улар араһында үҙ-ара сыуалыш сығыуҙан Хоҙай һаҡлаһын. Балаларығыҙҙың һәр ҡайһыһы үҙ урынын, шөғөлөн, дәрәжәһен,исемен, шулай уҡ ырыу тамғаларын белергә тейеш. Был дәүләт тотороҡло булһын һәм ырыуығыҙҙың данлы исемен һаҡлау өсөн кәрәк». Шулай

итеп, аңлашылмаусанлыҡтар һәм бәхәстәрҙән ҡотолоу, дәүләттең һәм халыҡтың тотороҡло үҫеше, теге йәки был ырыуҙың абруйын күтәреү өсөн халыҡ үҙенең генеалогик йылъяҙмаһын, ата-бабаларының шәжәрәһен, ырыу тамғаларын белергә һәм төҙөргә бурыслы булған.

Шәжәрә башҡа төрки халыҡтарҙыҡы кеүек үк 15- 16 быуаттарҙа телдән телгә тапшырылған. Шәжәрәңде белеү, мәҫәлән, башҡорттарҙа мотлаҡ һанала. Был турала билдәле шағир-мәғрифәтсе, ғалим М. Өмөтбаев шулай тип яҙып ҡалдырған: «Аҫаба башҡортҡа 3 нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе- үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе – йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө – хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе белеү».

Ырыу тарихы һәм тарихи хәл-ваҡиғаларҙан тыш, шәжәрә үҙенә теге йәки был нәҫел йәшәгән биләмә, тормош-көнкүреш, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләре, мифология,ауыҙ-тел ижады тураһында бай материал туплай. Шуға күрә лә шәжәрәне халыҡ тормошо энциклопедияһы тип тә атарға мөмкин. Шуны ла билдәләргә кәрәк, ул тарихи һәм лингвистик сығанаҡтан бигерәк, йәш быуынға дөрөҫ тәрбиә биреү ысулы ла булып тора. Тамырҙарын, ырыуының тамғаларын белеү кешегә үҙен ошо ерҙең хужаһы, ата-бабалар йолаһын лайыҡлы дауам итеүсе итеп тойоу,үҙ ҡылыҡтары, эше өсөн һәм ҡәрҙәштәре, ауылдаштары, халҡы алдында яуаплы булыу хоҡуғын бирә.

Бөйөк рус шағиры А. Пушкиндың: «үҙ тарихын белмәгән халыҡ- ҡырағай халыҡ», тигән бик хаҡ һүҙҙәре бар. Шәжәрәңде белеү- үҙ нәҫелеңдең, ырыуыңдың һәм халҡыңдың тарихын белеү ул. Нәҫел – ырыу тураһындағы мәғлүмәттәр ныҡлы һаҡланылған, быуындан быуынға аманат рәүешендә ҡалдырыла килгән, ҡомартҡы итеп һаҡланған. Киләсәк быуындар ҙа, атай-олатайҙар кеүек үҙ тамырҙарын, туғанлыҡ тарихын белһен тиһәк, һәр кеше эҙләнергә, өйрәнергә, шәжәрә ағасын төҙөүҙе дауам итергә тейеш.

Мин, Мөхәмәтшина Зилә, Юрматы ырыуы ҡыҙы, үҙ нәҫелемдең тарихын өйрәнеп, ата-бабаларыбыҙҙың аманатына тоғро ҡалып, Мөхәмәтшиндар шәжәрәһен үрҙем һәм һеҙгә уны һөйләп күрһәтәм. Минең фамилиям һигеҙенсе быуын олатайым- Мөхәмәтша исеменән барлыҡҡа килгән. Шулай итеп, беҙҙең нәҫел Мөхәмәтша олатайҙан башлана. Уның улы Ғәҙелша, Ғәҙелшаның улы

Ҡәмарша, Ҡәмарша олатайҙың улы Ғәбделнафиҡ, Ғәбделнафиҡтың улы Садиҡ булған. Минең олатайҙың олатаһы Дәүләтша. Дәүләтша олатайҙың улы Сабир. Ул 1886 йылда тыуған. Сабир олатай менән Ғәтифә өләсәй яҙмыштарын бергә бәйләп 3 бала үҫтерәләр. 1925 йылда уларҙың беренсе балалары – Минзифа донъяға килә. Уның балалары булмай. Пенсияға сыҡҡансы ул Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәй, 2000 йылда Мәләүез ҡалаһына күсеп килә һәм 2005 йылда яҡты донъя менән хушлаша.

Ғаиләгә шатлыҡ өҫтәп икенсе балалары тыуа. Уға Минияр тип исем ҡушалар. Ул 1926 йылда донъяға килә, минең атайымдың атаһы. Ул Өсбүләк ауылы ҡыҙы- Мәрйәмгә өйләнә һәм 5 балаға ғүмер бүләк итәләр. Минияр олатай Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. 1944 йылда 18 йәшлек егет үҙенең тыуған илен немец илбаҫарҙарынан азат итергә һуғышҡа китә. Һуғышта ул Кенигсберг ҡалаһына тиклем барып етә һәм уны азат итеүҙә ҡатнаша. Ул «Кенигсбергты алған өсөн», «Батырлыҡ өсөн», «Дан» орден-миҙалдары менән бүләкләнә. Һуңынан 1950 йылға тиклем Совет Армияһында хеҙмәт итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы ул 1989 йылда үлеп китә.

1953 йылда Минияр олатай менән Мәрйәм өләсәйҙең беренсе балалары Зөләйха донъяға килә. Уның 3 ҡыҙы бар. Ильмира 1977 йылғы, әлеге ваҡытта ғаиләһе менән Санкт-Петербург ҡалаһында йәшәй һәм Артур исемле малай үҫтерәләр, ул 2000 йылда тыуа. Гөлназ 1981 йылда тыуып, ғаиләһе менән Мәләүез ҡалаһында йәшәй. Уның әмир исемле 2007 йылғы малайы бар. Өсөнсө ҡыҙҙары Гөлнара 1983 йылда тыуған, әле Мәләүез ҡалаһында 11 класта уҡып йөрөй.

Өләсәй менән олатай ғаиләһендә икенсе бала булып 1955 йылда Зөлфиә исемле ҡыҙ бала тыуа. әлеге ваҡытта ул Мәскәү өлкәһе Сергиев-Пасад ҡалаһында үҙенең ғаиләһе менән йәшәй. Уның 2 ҡыҙы, 1 улы бар. Оло ҡыҙы Эльвира 1980 йылда тыуа. Ул ғаиләһе менән Сургут ҡалаһында йәшәй һәм 2 ул үҫтерә: Максим һәм Роман. Уртансы ҡыҙы Әлфиә 1983 йылғы. Ул да Сургут ҡалаһында йәшәй һәм эшләй. Кесе улдары Илнур 1987 йылда тыуып, әлеге көндә Мәскәү ҡалаһында юғары уҡыу йортонда уҡып йөрөй.

Минияр олатай менән Мәрйәм өләсәйҙең өсөнсө балаһы булып ир бала донъяға килә. Уға Минегәрәй тип исем ҡушалар, ул 1957 йылғы. әлеге көндә ул Мәләүез ҡалаһында йәшәй. Уның 2 улы, 1 ҡыҙы бар. Оло улы Фәнис 1981 йылда тыуа. Уларҙың Камила исемле ҡыҙҙары бар. Икенсе улы Нәфис 1982 йылда донъяға килә. Уның да ғаиләһендә Аделина исемле ҡыҙ үҫеп килә. Кесе ҡыҙҙары Айгөл 1987 йылда тыуған. Ул да Мәләүез ҡалаһында йәшәй һәм унда эшләп йөрөй.

Дүртенсе бала булып олатай ғаиләһендә 1959 йылда Рәис ағай тыуа. Ул ғаиләһе менән Мәскәү ҡалаһында йәшәй һәм 2 бала үҫтерәләр. Ҡыҙҙары Гүзәл 1983 йылғы, улдары Ринат 1986 йылда тыуған. Икеһе лә Сургут ҡалаһында йәшәй һәм унда эшләп йөрөйҙәр.

Олатай менән өләсәй ғаиләһендә бишенсе бала булып ир бала донъяға килә. Уға Рәфис тип исем ҡушалар, ул 1965 йылда тыуа. Рәфис – минең атайым. Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, атайым тыуған ауылында шофер булып эш башлай. 1988 йылда Ғәлиә исемле ҡыҙ менән донъя ҡороп ебәрәләр. Улар 2 ҡыҙ үҫтерә. Оло ҡыҙҙары Лилиә 1990 йылда тыуған, әлеге көндә ул Өфө ҡалаһында уҡып йөрөй. Икенсе ҡыҙҙары мин- Зилә. Әлеге ваҡытта Федоровка 1-се муниципаль дөйөм урта белем биреү мәктәбенең 10 класында уҡыйым.

Сабир олатайҙың ғаиләһендә өсөнсө бала булып 1932 йылда Саимә исемле ҡыҙ бала тыуа. Улар Сәйфулла бабай менән 4 бала үҫтереп, ауылда йәшәйҙәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы Сәйфулла бабай хәҙерге көндә донъяла юҡ инде. Уларҙың улы Хәмит 1956 йылда тыуған һәм әлеге көндә үҙенең ғаиләһе менән Саратов ҡалаһында йәшәй, 2 улдары бар. Оло улдары Роман 1987 йылғы, ә кесеһе - Руслан 1989 йылғы. Икеһе лә юғары уҡыу йортонда уҡып йөрөйҙәр.

Саимә өләсәйҙең икенсе балаһы – Хәлиҙә. Ул 1958 йылда донъяға килә һәм уның Таһир исемле улы бар. Уға 28 йәш. Ҡатыны менән Мая исемле матур ҡыҙ үҫтерәләр. Ул 2007 йылда тыуған.

Фәрит – Саимә өләсәйҙең өсөнсө улы. Ул 1961 йылда донъяға килә, хәҙерге көндә Мәләүез ҡалаһында йәшәй, ғаиләһендә 2 ҡыҙ үҫә. Оло ҡыҙҙары әлфиә 1987 йылда, ә кесеһе Зөлфиә 1993 йылда тыуған.

1965 йылда Саимә өләсәйҙең кесе ҡыҙы Фәриҙә тыуа. Уның 3 улы бар. Оло улы Илнур 1985,  уртансы улы Рәмил 1989 йылғы, ә кесе улы Фәнүр Өсбүләк ауылында 2 класта уҡып йөрөй. Шулай итеп, мин бөгөн һеҙгә Мөхәмәтшиндар шәжәрәһен һөйләп ишеттерҙем.

Тарихын, шәжәрәһен өйрәнеүгә халыҡты йәлеп итеү маҡсатында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте «Шәжәрә байрамдарын ойоштороу» тураһында ҡарар ҡабул итте. Шәжәрә байрамдары – онотолоп барған, ләкин сикһеҙ әһәмиәтле сараларҙың береһе. Улар үткәнеңә күҙ һалырға, тарихты аңларға, белергә ярҙам итә. әле шәжәрә байрамдары Башҡортостандың төрлө районларында үтә, улар матур йола итеп тергеҙелһә, киләсәк быуын балалары үҙ тамырҙарын белеп үҫер, ырыу ағасының ныҡлы булыуын ҡайғыртыр тип ышанам. Изге йолалар һуңғы йылдарҙа бер аҙ онотола төшһә лә, хәҙер халыҡтың милли үҙаңы яңынан уяна башланы,бөгөн күп кешеләр ғаиләһенең, иленең, ауылының тарихын белергә ынтыла. Был аңлашыла ла, сөнки күптән билдәле бер хәҡиҡәт бар- тарихҡа күҙ һал да, киләсәгеңде күҙалла. Был күркәм сараның ҡаҙанышы- ата-бабаларыбыҙға, нәҫелебеҙгә ҙур хөрмәт күрһәтеү ул.

Ваҡыт үтә. Ергә яңынан-яңы быуындар килә. Тормош дауам итә. Итһен! Тик быуындар сылбыры өҙөлмәһен! Ул минән, һинән, беҙҙән тора. «Тереләрҙең ҡәҙерен бел, үлгәндәрҙең ҡәберен бел» тигән боронғолар. Сығышымдың аҙағында мин үҙемдең тиҫтерҙәремә, дуҫтарыма шуны әйтер инем: тамырҙарыбыҙҙы онотмайыҡ, үҙебеҙҙең нәҫелебеҙгә генә хас булған күркәм ғәҙәттәрҙе һаҡлайыҡ. Туғандарыбыҙға, халҡыбыҙға кәрәкле кешеләр булып йәшәйек.

«Илен белмәгән - игелекһеҙ, халҡын белмәгән холоҡһоҙ, нәҫелен белмәгән - нәсәпһеҙ», - ти халыҡ. Беҙ игелекле лә, холоҡло ла, нәҫел-нәсәпле лә булып йәшәһәк ине.

Ырыу ағасым һин, эй шәжәрәм!
Һин үҫкәндә донъя йәшәрә.
Күкрәк кире олон тарбайтҡанда,
Күкте терәп ерҙә һин торғанда,
Йәшәргә лә әле йәшәргә!

## Үҙ шәжәрәһен төҙөргә теләгәндәргә бер нисә кәңәш

1. Эште ата һәм әсә яғынан бөтә туғандарҙы асыҡлауҙан башларға кәрәк. Тереләрҙең тыуған йылын, үлгәндәрҙең йәшәгән йылдарын асыҡлағыҙ.
2. Горизонталь шәжәрә төҙөгәндән һуң уларҙы вертикаль буйынса берләштереп ҡарарға кәрәк. Бөтә ейәндәр – артабан атайҙар – шунан олатайҙар – ҡарт олатайҙар. Шулай эшләгәндә, фамилияғыҙ кемдән башланыуын асыҡларға мөмкин. Ауылда һәм тирә-яҡтағы ауылдарҙа һеҙҙең ырыуығыҙға тағы ниндәй фамилиялар ҡарағанлығын белегеҙ. Зат-ырыуығыҙ вәкилдәре тормошонан фәһемле эпизодтарҙы белергә, ҡыҙыҡлы документтар, фотографиялар табырға тырышығыҙ.
3. Ситт яҡтарҙа йәшәгән туғандарығыҙға, башҡа берәй мәғлүмәт алыу маҡсатында, хат яҙығыҙ.
4. Баҫылған шәжәрәләрҙә һеҙҙең ырыу менән берәй бәйләнеш барлығын тикшерегеҙ.
5. Загс органдарына, архивтарға мөрәжәғәт итегеҙ, йә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгенә шәжәрә төҙөргә заказ бирегеҙ.
6. Шәжәрә ағзалары булған исем, фамилияларҙы асыҡлау маҡсатында БАССР тарихы буйынса материалдарҙы тикшерегеҙ, был документтарҙа улар нимәгә бәйле телгә алыныуы тураһында мәғлүмәттәрҙе яҙып алығыҙ.
7. Мәғлүмәттәрҙе (тыуған йылдарын, мөһим ваҡиғаларҙы һ.б.) асыҡлағандан һуң шәжәрә ағасын төҙөүгә тотоноғоҙ.

Бөтәһе өсөн дә ҡулайлы кәңәштәр юҡ, шуның өсөн дә һәр кем үҙе өсөн уңайлы ысулды һайлай.

**Файҙаланылған әҙәбиәт:**

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы.- Өфө, 1994

2. «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы.- № 7, № 10, 2008

3. «Йәшлек» газетаһы.- № 88, 2009

4. Шәжәрә байрамдарын ойоштороусыларға кәңәштәр. -«Эшлекле династия».- Өфө, 2009